Матбуғат – 2024

## «Йәшлек» менән бергә ҡал!

Ҡәҙерле уҡыусыларыбыҙ, киләһе йылда ла «Йәшлек»тән айырылмаҫһығыҙ, моғайын. Мәлде үткәреп ебәрмәгеҙ! Яҙылмаған булһағыҙ, тиҙерәк почта бүлегенә ашығығыҙ һәм гәзитебеҙгә яҙылыуҙы раҫлаған квитанцияғыҙҙың күсермәһен беҙгә ебәрә һалығыҙ!

Ғәҙәттәгесә, үҙебеҙҙең тоғро уҡыусыларыбыҙға шәп бүләктәр ҙә вәғәҙә итәбеҙ.

«Йәшлек» – һеҙҙең өсөн, «Йәшлек» – һеҙҙең хаҡта!

*Бергә булдыҡ, бергә ҡалайыҡ!*




Ал да нур сәс халҡыңа!

# Йәшлек

15 сентябрь, йома
2023 йыл
№37 (11448)

12+

Башҡортостан йәштәре гәзите
1923 йылдан башлап сыға
Һатыуҙа хаҡы ирекле

◆ Фестивалдәр

# Әйҙә, уйнарға!




Баш ҡалабыҙ Өфөлә «Әйҙә уйнарға» Бөтә Рәсәй уйын фестивале башланды. Республика Башлыҡы Радий Хәбиров башланғысы менән беренсе тапҡыр ойошторолған сарала илебеҙҙең төрлө төбәгенән уйынсыҡ һәм балалар уйындары етештереүсе предприятиелар, оҫталар-һөнәрселәр, уйынсыҡ эшләү менән шөғөлләнгән студиялар, художество коллективтары, уйынсыҡ дизайнерҙары, ҡурсаҡ жанрында эшләгән театр коллективтары ҡатнаша. Улар бер-береһе менән тәжрибә уртаҡлаша, балалар тауарҙары тармағын үҫтереү өсөн яңы мөмкинлектәр хаҡында фекер алыша.

13

ООО «ГАЗСЕРВИСЦЕНТР»
предлагает свои услуги:
■ диагностика (продление срока эксплуатации) газовых плит, котлов
■ поверка промышленных газовых счетчиков, расходомеров, тепловычислителей
■ поверка газовых, водяных счетчиков
Запись по тел.: 8 937 838 68 04
8 347 257 44 01
Реклама

◆ Иғтибар!

### Академик стипендия күпме?

**Башҡортостанда колледж студенттары өсөн академик стипендия нормативтары раҫланды.**

Документҡа ярашлы, 2023 йылда республика бюджеты иҫәбенә стипендия фондын формалаштырыу өсөн норматив күләме (индексацияны һәм Урал коэффициентын иҫәпкә алып) түбәндәгесә була:

– академик стипендия алған урта махсус уҡыу йорттары студенттары өсөн – айына 765 һум,

– социаль стипендия алған урта махсус уҡыу йорттары студенттары өсөн – айына 1148 һум.

2024 йылда ул 796 һәм 1194 һумға тиклем арттырыла.

### Ата-әсәләргә эшләргә рөхсәт ителде

**2024 йылдың 1 ғинуарынан инвалид балаларҙың ата-әсәләре һәм опекундары социаль түләүҙәрҙе юғалтмайынса эшкә урынлаша ала.**

Тейешле бойороҡ проектын Рәсәйҙең Хеҙмәт министрлығы әҙерләгән.

Әгәр ата-әсә тулы булмаған эш көнөнә, ситтән тороп, өйҙә, авторлыҡ хоҡуғы һәм граждандлыҡ-хоҡуҡи характерҙағы килешеүҙәр буйынса эшкә урынлашһа, шулай уҡ шәхси эшҡыуарҙар һәм үҙмәшғүлдәр булһа, пособиелар һаҡлана. Хәҙер инвалид балаларҙың ата-әсәләренә һәм опекундарына айына 10 мең һум аҡса түләнәсәк. Уны эшләмәгән граждандар ғына алырға мөмкин.

| 18 сентябрь, дүшәмбе | 19 сентябрь, шишәмбе | 20 сентябрь, шаршамбы | 21 сентябрь, кесе йома | 22 сентябрь, йома | 23 сентябрь, шәмбе | 24 сентябрь, йәкшәмбе |
|---|---|---|---|---|---|---|
| Аяҙлы-болотло | Аяҙлы-болотло | Аяҙлы-болотло | Аяҙлы-болотло | Аяҙлы-болотло | Урыны менән ямғыр | Аяҙлы-болотло |
| Көндөҙ: + 22, төндә: + 11 | Көндөҙ: + 23, төндә: + 11 | Көндөҙ: + 18, төндә: + 13 | Көндөҙ: + 23, төндә: + 13 | Көндөҙ: + 23, төндә: + 13 | Көндөҙ: + 20, төндә: + 13 | Көндөҙ: + 18, төндә: + 12 |
| Ел көньяҡтан, 1 м/с | Ел көньяҡтан, 1 м/с | Ел көньяҡтан, 1 м/с | Ел көньяҡтан, 1 м/с | Ел көньяҡ-көнбайыштан, 1 м/с | Ел көнбайыштан, 1 м/с | Ел төньяҡтан, 1 м/с |

«Гисметео».

1445 һижри йыл, Сәфәр айының 30-сы көнө

Ҡояш ҡалҡа – 6.49, байый – 19.32. Көн оҙонлоғо – 12.43.

podpiska.pochta.ru

# Пассажирҙар ташыуға етди иғтибар бирелә

Былтыр Башҡортостанда автобустар 258 миллион кешене ташыған. Был күрһәткес буйынса (Рәсәйҙең статистика хеҙмәте мәғлүмәттәре) беҙ илдә – дүртенсе урында.

"Беҙҙең өсөн был ябай һандар ғына түгел, ә республика бер нисә йыл алып барған етди эш һөҙөмтәһе", – тип яҙған социаль селтәрҙә БР Башлығы Радий Хәбиров.

Республика етәксеһе белдереүенсә, 2019 йылдан алып урта һәм ҙур класлы 1080 автобус һатып алынған. Шул иҫәптән федераль финанс ярҙамы менән дә. Шәхси пассажир ташыусылар ҙа автобус паркын яңырта.

"Беҙ экология яғын да онотмайбыҙ – алынған транспорттың байтағы газ яғыулығында йөрөй. Быйыл 32 яңы туристик автобус та алдыҡ, ниәт – тағы ла 20-не алыу. Сочи, Анапа, Ялта кеүек курорттарға турҙар ойоштороу ҡуҙғаллана. Уңайлы түләү системаһын да булдырҙыҡ, тип уйлайым. "Алға" транспорт картаһы юлда арзаныраҡ хаҡка йөрөү мөмкинлеген бирә. Шулай уҡ уның менән "Бәхетле сәғәт" проекты ла бик уңайлы – бер сәғәттә бер билет менән төрлө автобусҡа күсеп ултырырға була", – тиелә Башлыҡтың яҙмаһында.

Әле ыңғай яҡҡа үҙгәрештәр дауам итә. Автобустар күберәк тә, яңыраҡ та буласаҡ һәм, әлбиттә, йышыраҡ та йөрөйәсәк.



*Радий Хәбиров: "Юлдарҙа имен йөрөгөҙ!"*

# Ирәндек һыртындағы яткылыҡтар эшкәртелмәйәсәк

**Радий Хәбиров Әбйәлил һәм Баймаҡ районларындағы Фәйзулла майҙансығында эҙләү эштәрен үткәреүҙе контролдә тотоу мәсьәләһе йәһәтенән ҡаҙылма байлыҡтарҙы файҙаланыу буйынса ведомство-ара комиссия эшенә ыңғай баһа бирҙе.**

– Ошо районларҙа һәм Башҡортостанда йәшәүселәрҙе әлеге биләмәлә ниндәй эштәр алып барыуҙары борсой ине. Ер аҫты байлыҡтарын файҙаланыу буйынса федераль агентлыҡ менән байтаҡ һөйләшеү үткәрелде, беҙҙе ишеттеләр. Әбйәлил һәм Баймаҡ райондары хакимиәттәре башлыҡтарынан халыҡҡа ошо мәғлүмәтте еткереүҙәрен һорайым. Республикала яткылыҡтарҙы эшкәртеү эштәре әүҙем бара, ләкин беҙ ниндәй урындарға бөтөнләй тейергә ярамағанлығын аңларға тейешбеҙ, – тип билдәләне Башҡортостан Башлығы аҙналыҡ оператив кәңәшмәлә.

Хөкүмәт премьер-министры урынбаҫары Азамат Абдрахманов һүҙҙәренсә, 1 мартта Ер аҫты байлыҡтарын файҙаланыу буйынса федераль агентлыҡ һәм подрядсы араһында Баймаҡ, Әбйәлил райондарындағы Фәйзулла майҙансығында оксидлы марганец мәғдәндәрен эҙләү эштәре үткәреү өсөн контракт төҙөлгән.

Килешеү шарттарына ярашлы, подрядсы 2025 йылға тиклем Фәйзулла майҙансығының геологик төҙөлөшөн тикшерергә тейеш.

Беҙҙең республикала марганец уҙған быуаттың 30 – 40-сы йылдарында уҡ асыҡланған. 60 – 70-се йылдарҙа геофизик, геологик һәм тематик тикшереүҙәр үткәрелгән. Дәүләт һәр 30 – 40 йыл һайын тәбиғәт ресурстары тураһындағы мәғлүмәттәрҙе рәсмиләштереп тора.

– Подрядсы был эштәрҙе Рәсәйҙең ер аҫты байлыҡтарын инвентаризациялау буйынса дөйөм дәүләт программаһына ярашлы башҡарған. Әлеге ваҡытта илдең 10 участкаһында, шул иҫәптән Тымыҡ океанда шундай эштәр бара. Шуныһы мөһим: лицензия файҙалы ҡаҙылмалар табыуҙы күҙ уңында тотмай ине. Тикшереү һөҙөмтәләре буйынса геологик отчет бирелгән. Унда марганец мәғдәндәре сифатлы булмағас, артабанғы эштәрҙе башҡарыу мөмкин түгеллеге билдәләнгән. Шуға күрә, ҡануниәткә ярашлы, Ер аҫты байлыҡтарын файҙаланыу буйынса федераль агентлыҡ һәм подрядсылар менән ағымдағы йылдың 29 авгусынан яҡтарҙың үҙ-ара килешеүе буйынса дәүләт контрактын өҙөү тураһында ҡарар ҡабул ителде, – тип аңлатма бирҙе Азамат Абдрахманов.

# Һәр берегеҙҙе көтәбеҙ!

**Өфөнән Салауат Юлаев исемендәге икенсе батальон яугирҙәре хәрби әҙерлек үтеү урынына юлланды. Хәрбиҙәрҙе әҙерләү өсөн ай ярым ваҡыт кәрәк. Был турала республика Башлығының Рәсәй милли гвардия ғәскәрҙәре менән үҙ-ара эш итеү буйынса кәңәшсеһе, подразделениены ойоштороу инициаторы Артур Йомағужин белдерҙе.**

Уның әйтеүенсә, республикабыҙҙан 40-ҡа яҡын ир-егет киткән, уларҙың 70 проценты – хаҡлы ялға сыҡҡан көс структуралары хеҙмәткәрҙәре. Юлаевсылар араһында төп терәк – тап улар.

– Башҡа субъекттар беҙгә көнләшә. Сөнки Радий Хәбировтың указы 100 процентҡа эшләй (ярҙам күҙ уңында тотола. – А. З.). Беренсе Салауат Юлаев батальоны яугирҙары быны үҙҙәрендә тойҙо. Егеттәр льготалар менән файҙалана, аҡса түләнә, отпуск бирелә, туҡланыу һәйбәт. Муниципалитет башлыҡтары яугирҙарҙың ғаиләләренә ярҙам күрһәтә. Шылтыратып ярҙам һорарға ла кәрәкмәй – барыһы ла контролдә тотола. Беҙгә Тыуған илде тыныс, ҡыйыу һәм батырҙарса һаҡларға ғына ҡала. Шуға күрә Рәсәйҙең башҡа төбәктәренән ир-егеттәр беҙҙә хеҙмәт итергә теләй, – тине Артур Йомағужин.

Әлеге ваҡытта Башҡортостанда Салауат Юлаев исемендәге икенсе ирекле батальонға яҙылыу дауам итә. Ирекмәндәр йыйыу буйынса ҡуйылған план үтәлһә лә, теләүселәр күп булғанлыҡтан, эш дауам итә.

**Рәсми сайттар мәғлүмәттәре буйынса А. ЗИННУРОВА әҙерләне.**

# Ҙур театрҙа – Башҡорт опера һәм балет оҫталары сығышы

**Ошо көндәрҙә Башҡорт опера һәм балет театры Рәсәйҙең Ҙур театрында сығыш яһаны. Өфө артистары театрҙың тарихи сәхнәһендә Николай Римский-Корсаковтың "Садко" операһын тәҡдим итте. Мәскәүҙәге премьераға Башҡортостан Республикаһы Башлығы Радий Хәбиров та барҙы. Унда шулай уҡ күп кенә абруйлы ҡунаҡ саҡырылғайны.**

– Беҙҙең опера һәм балет театрының юғары кимәлдә булыуы ошондай ҙур сәхнәлә сығыш яһау мөмкинлеге бирә, – тип билдәләне Радий Хәбиров. – Театрыбыҙ коллективы һәр ваҡыт мәҙәни шедеврҙар әҙерләй, әлбиттә, был шедеврҙарҙы Мәскәү, ғөмүмән, Рәсәй халҡына күрһәтергә теләйбеҙ. Тап шуға ла Ҙур театр менән хеҙмәттәшлек итәбеҙ, йылына бер тапҡыр бында мотлаҡ яңы премьера алып килергә тырышабыҙ. Тарихи сәхнәлә сығыш яһау – ҙур хөрмәт, беҙҙең өсөн был бик мөһим.

Башҡорт опера һәм балет театрында спектаклдең премьераһы былтыр ноябрҙә булды. Ә коллектив Рәсәйҙең Ҙур театрының тарихи һәм яңы сәхнәләрендә «Фауст» (2019), «Аттила» (2020), «Дон Кихот» (2021) һәм «Vita Nuoxa» (2022) операларын күрһәткән.

## БЫЛ АҘНАЛА БЕҘҘЕ...

### Ҡыҙыҡһындырҙы

***Seascape Alaska диңгеҙ экспедицияһы тикшеренеүселәре диңгеҙ төбөнә төшкәндә Аляска яры буйында серле «алтын шар» тапҡан.***

Был шарҙың нигеҙендә ҙур ғына тишек бар, ул ныҡ итеп ҡаяға йәбешкән һәм күп булмаған аҡ губка араһында торған.

Табышты өҫкә сығарғандар, әммә яҡындан ҡарап та уның нимә икәнен асыҡлай алмағандар. Үле губка ла, коралл да, ниндәйҙер диңгеҙ хайуанының йомортҡаһы ла түгел. Бер генә нәмә асыҡ – ул биологик сығышлы. Ғалимдар ике аҙна уның нимә икәнен асыҡлай алмай. Был иһә Ер шарында асаһы серҙәр күп булыуын раҫлай.

### Ғәжәпләндерҙе

***Дондағы Ростов ҡалаһында бер ҡатын үҙенең ауырлы икәнен балаһы тыуыуға бер сәғәт ҡалғас ҡына белгән.***

Ҡаланың 8-се дауаханаһына килгән ҡатын эсе ауыртыуға зарлана. Табиптар уның ауырлы булыуын һәм тиҙҙән әсәй буласағын хәбәр итә. Ысынлап та, бер сәғәттән ҡатын 3,5 килограмлыҡ һау-сәләмәт бала таба.

Төбәктең Һаулыҡ һаҡлау министрлығынан хәбәр итеүҙәренсә, ҡатын быға тиклем бер тапҡыр ҙа медицина учреждениеһына мөрәжәғәт итмәгән һәм иҫәптә лә тормаған.

### Уйландырҙы

***1 сентябрҙән түләүле медицина хеҙмәте күрһәтеүҙең яңы ҡағиҙәләре үҙ көсөнә инде.***

Мотлаҡ медицина страховкалауы буйынса белгестәр ҡайһы осраҡта пациентҡа күрһәтелгән медицина хеҙмәте өсөн түләргә тура киләсәген аңлатты. Улар әйтеүенсә, мотлаҡ медицина страховкалауы аша күрһәтелгән медицина хеҙмәте өсөн түләргә кәрәкмәйәсәк. Йәғни терапевт биргән йүнәлтмә буйынса улар бушлай анализ тапшыра, медицина тикшереүе үтә һәм белгестәргә күренә ала. Ә инде дауалаусы табиптан йүнәлтмә алмайынса дауаханаға ятҡан осраҡта, бының өсөн түләргә тура килер. Шулай уҡ ниндәйҙер айырым процедуралар үтергә теләгән осраҡта ла уларҙы үҙ иҫәбеңә үтергә кәрәк буласаҡ.

### Хәүефләндерҙе

***Ғалимдар фекеренсә, алкоголь һәр дозала ла организмдың бөтә органдарына ҙур зыян килтерә.***

Бөтә донъя һаулыҡ һаҡлау ойошмаһы мәғлүмәттәре буйынса, алкоголде артыҡ күп ҡулланыуҙан донъяла 237 млн ир-егет һәм 46 млн ҡатын-ҡыҙ яфалана. Йыл һайын 3 млн кеше үлә. Шул уҡ ваҡытта йәмғиәттә, әҙ күләмдәге алкоголдең организмға зыяны юҡ, тигән ҡараш йәшәй. Әммә был мәсьәләне өйрәнеүсе ғалимдар икенсе фекергә килгән.

Медицина фәндәре докторы, профессор Михаил Стаценко әйтеүенсә, спирттың хәүефһеҙ дозаһы булмай. Алкоголь бөтә органға ла зыян килтерә. Әҙ генә дозала алкоголдең файҙаһы бар, тиеүселәргә ҡарата иһә ул, 8 грамм спиртлы эсемлек ҡан тамырҙары менән проблема булған осраҡта ярҙам итһә лә, башҡа ауыртҡан урындарға зыян килтереүе ихтимал, тип үҙ фекерен еткерә. «Шунлыҡтан алкоголдең хәүефһеҙ дозаһы хаҡында ышаныслы һүҙ йөрөтөү мөмкин түгел», – ти ул.

С. ЛОТФУЛЛИНА әҙерләне.

podpiska.pochta.ru

# Башҡортостандың Дәүләт Йыйылышы – Ҡоролтайы яңы составта эш башлай

**Башҡортостандың Үҙәк һайлау комиссияһы БР Дәүләт Йыйылышы – Ҡоролтайҙың етенсе саҡырылышына депутаттар һайлауҙың берҙәм республика округы буйынса рәсми һөҙөмтәләрен иғлан итте.**

Тауыштар шулай бирелгән:
«Берҙәм Рәсәй» — 1 063 631 кеше
КПРФ — 180 696
ЛДПР — 119 373
«Ғәҙел Рәсәй — Патриоттар — Хәҡиҡәт өсөн» — 114 056
«Яңы кешеләр» – 52 688.




«Берҙәм Рәсәй» партияһы БР Дәүләт Йыйылышы – Ҡоролтайҙа 41 мандат алды, КПРФ – алты, ЛДПР һәм «Ғәҙел Рәсәй — Патриоттар — Хәҡиҡәт өсөн» – дүртәр.

Бер мандатлы округтар буйынса һөҙөмтәләр шундай:
«Берҙәм Рәсәй» партияһынан – 46 кеше үҙ-үҙен күрһәтеүсе – дүрт
КПРФ – ике
«Яңы кешеләр», «Йәшелдәр», «Ғәҙел Рәсәй — Патриоттар — Хәҡиҡәт өсөн» – берәр.

Парламенттың яңы саҡырылыштағы тәүге ултырышы 5 октябрҙә үтәсәк.

– Шуны әйтәм: «Берҙәм Рәсәй» халыҡтың күҙенә тура ҡарай ала. Сөнки улар ауыр ваҡыттарҙа кешеләр янында булды. Махсус хәрби операцияға, ковидҡа ҡаршы көрәшкәндә мохтаждарға ярҙам күрһәтелде. Был тауыш биреүҙә лә сағылғандыр, моғайын, – тине Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров. Ул һайлауҙа ҡатнашҡан барлыҡ сәйәси партияға ла рәхмәт белдерҙе.

– Беҙҙә төрлө партияның ҡатнашыуына бик шатмын. Һис шикһеҙ, был Рәсәйҙә сәйәси көстәрҙең дөйөм урынлашыуын сағылдыра. Дәүләт Йыйылышында парламенттың бөтә партияһы ла күрһәтелгән. Был беҙҙең өсөн бик мөһим, барыһына ла уңыштар теләйбеҙ. Һайланған депутаттарға ла уңыштар. Әйткәнемсә, депутаттар составының 50 проценттан ашыуы яңыра. Бик күп сағыу, ҡыҙыҡлы кешеләр килде. Яңы ҡоролтайға уңыштар теләйбеҙ, – тине республика етәксеһе.

Әйткәндәй, етенсе саҡырылыш Дәүләт Йыйылышы – Ҡоролтайҙа элеккесә 110 депутат эшләйәсәк. Һуңғы рәсми мәғлүмәттәр тиҙҙән билдәле була. Унда беҙ Ҡоролтайҙың яңы рәйесе, урынбаҫарҙары, даими эшләүсе депутаттар, комитеттар тураһында ентекләберәк беләсәкбеҙ.

Парламентарийҙарға уңыштар теләйбеҙ! Иң мөһиме – халыҡ менән бергә, халыҡ мәнфәғәтенә эшләһендәр.

**А. ЗИННУРОВА әҙерләне.**

# Йәшәү минумы күпме?

**Республикала 2024 йылға халыҡтың йән башына йәшәү минимумы күләме билдәләнде.**

2024 йылдың 1 ғинуарынан республикала бер кешегә йәшәү минимумы 13 576 һум тәшкил итергә тейеш (хәҙер – 12 650 һум). Эшкә һәләтле халыҡ өсөн йәшәү минимумы 1008 һумға арта (14 798 һумға еткерелә). Пенсионерҙарға – 12 470 һум (+ 480 һум), балаларға 13 169 һум (+ 898 һум) була. Бындай күрһәткестәр киләһе йылдың аҙағына тиклем ғәмәлдә ҡала.

Шулай итеп, граждандарҙың төрлө категорияһы өсөн йәшәү минимумы 4 проценттан алып 7,3 процентҡа тиклем арттырыла.

**З. ХӘСӘНОВА.**

## З һөйләм менән

■ **РФ Хөкүмәтенең ҡарарына ярашлы, Башҡортостан донъя кимәлендәге университет кампустары селтәрен булдырыу буйынса программаны тормошҡа ашырыусы субъекттар иҫәбенә инде.** Евразия ғилми-белем биреү үҙәгенең вуз-ара студенттар кампусын 2023 – 2026 йылдарҙа ике сиратта асыу планлаштырыла: I сират 2023 йылдың декабрендә үк файҙаланыуға тапшырылһа, II сиратҡа 110 мең квадрат метрҙан ашыу майҙан менән яңы объекттар комплексы инәсәк.

■ **11 сентябрҙән «ЮВТ Аэро» авиакомпанияһы «Өфө» аэропортынан яңы йүнәлеш – Ярославль ҡалаһына тура рейс аса.** Осоштар дүшәмбе һәм шаршамбы көндәрендә «Bombardier CRJ200» самолеттарында башҡарыла. Самолет рейсҡа Өфөнән көндөҙгө сәғәт 1 тула 10 минуттан сыға.

■ **Башҡортостан быйыл һигеҙ айҙа тимер юлы буйлап экспортҡа 3,3 мең вагон иген оҙатҡан.** Был, уҙған йылдың ошо уҡ осоро менән сағыштырғанда, 10 тапҡырға күберәк. Бөтәһе 234,4 мең тонна бойҙай, май бирә торған культуралар орлоғо һәм арпа Төркиәгә, Ҡаҙағстанға, Ҡырғыҙстанға, Көньяҡ Африкаға ебәрелгән.

■ **17 сентябрҙә Стәрлетамаҡта үтәсәк Ҡала көнөндә Башҡортостан сода компанияһы "БСК-йүгереү" ("БСК Забег") марафонын үткәрә.** Ярыммарафондың дөйөм приз фонды дүрт миллион һумдан ашыу тәшкил итә. 21 километр арауыҡты беренсе булып килеүселәргә – 200 мең һум, компания хеҙмәткәрҙәренә 150 мең һум күләмендә аҡсалата бүләк ҡаралған.

■ **Башҡортостанда «Сәләмәтлек поезы»ның береһе 150 меңенсе пациентты ҡабул иткән.** Былтыр табиптарҙың күсмә бригадалары 120 меңдән ашыу кешене тикшергән булған. Акцияның сираттағы миҙгеле ошо аҙнала тамамлана, пациенттарҙы ҡабул итеү буйынса план 150 процентҡа үтәлгән.

**З. ЙӘҺҮҘИНА әҙерләне.**

**Дуҫтар, әйтер һүҙҙәрегеҙ, уртаҡлашыр шатлыҡтарығыҙ булһа, беҙгә яҙығыҙ, шылтыратығыҙ. Дежур телефон һандары – 8-965-941-15-32. Башҡа бәйләнеш саралары ла бар – гәзитебеҙҙең электрон почтаһының адресы: ye02@yandex.ru, "Бәйләнештә" социаль селтәрендә "Йәшлек" гәзите төркөмө.**

# Ә беҙҙең ауылда...



*Ә. СӘЛИМОВА, Дәүләкән районы:*

*– Иҫке Яппар ауыл халҡы ошо көндәрҙә яңы клуб асылыуына ҡыуана. Бинаға капиталь ремонт яһалды. Ауыл урындағы башланғыстарға булышлыҡ итеү (ППМИ) программаһында ҡатнашҡан. Төҙөлөш ике йыл дауам итте. Хәҙер бында барыһы ла яңы – ҡыйыҡ та, йылытыу системаһы ла, йыһаздар ҙа. Яҡты, матур, ҡотло. Ауылдарҙа клуб кешене үҙенә тартып торған бер рухи урын ул – ял итәһең, күңел асаһың, оҡшаған шөғөлөң менән булаһың, осрашаһың. Йәштәр ҙә таныша, аралаша.*

*Яңы клуб асылыу уңайынан матур концерт та ҡуйҙылар. Яппарҙарға мәҙәниәт усағын дәрләтеп йәшәргә яҙһын!*

*Дамир МОСТАФИН, Әлшәй районы хакимиәте башлығы ("Бәйләнештә"ге сәхифәһенән):*

*– Махсус хәрби операция биләмәһендәге яҡташтарыбыҙға ярҙам итеүҙән әлшәйҙәр ҙә ситтә ҡалмай. Ауылдар халҡы гуманитар ылау йыйыуға тос өлөш индерә. Шафран, Никифар, Сураҡай, Балғазы, Алдар ауылдарында маскировка селтәре үреү дәррәү бара. Бында уҡыусыларҙан алып пенсионерҙарға тиклем барыһы ла ҡатнаша. Мәҫәлән, Шафран ауылында бишенсе селтәрҙе әҙерләп бөткәндәр.*

*Уны Раевка ауылындағы Пионерҙар йортонда ла үрәләр. Ҡатын-ҡыҙҙарыбыҙ күптән оҫтарҙы. Иртәнән алып кискә тиклем эш тынмай.*

*Ярҙам ҡулы һуҙыусы һәр кемгә ҙур рәхмәт!*

*Миләүшә МОРАТОВА, Ауырғазы районының Талбазы ауылы:*

*– Ошо көндәрҙә район үҙәгендә балалар йорто бинаһына мемориаль тактаташ ҡуйылды. Был йорттоң 90 йыллыҡ бай тарихы бар.*

*Балалар йорто күп етемгә терәк булды, күпме ғүмерҙе ҡотҡарҙы. Унда тәрбиәләнгән билдәле шәхестәр ҙә байтаҡ. Береһе лә үҫкән ерен онотмай. Һәр тәрбиәләнеүсе үҙ урынын табып, һөнәр алып, тыуған илебеҙҙең төрлө тарафында эшләй. Бала ҡараусылар, уҡытыусыларҙың хеҙмәте лә баһалап бөткөһөҙ. Тактаташ – уларҙың барыһына ла ихтирам һәм хәтер билдәһе.*

**А. ИШЕМҒОЛОВА әҙерләне.**

podpiska.pochta.ru

◆ 2023 – Уҡытыусы һәм остаз йылы

# Остазыбыҙҙың һабаҡтары әле лә онотолмай

**Уҡытыусы... 2023 йыл Уҡытыусы һәм остаз йылы тип иғлан ителгәс, мине уҡытҡан уҡытыусыларымдың барыһын да һағынып, яратып иҫкә алдым. Һәр береһенән, ниндәй фәндән уҡытыуҙарына ҡарамаҫтан, төплө белем, яҡшы тәрбиә алғанмын.**

Оло рәхмәтлемен уларға! Ҡыҙғаныҫҡа ҡаршы, күптәре баҡыйлыҡҡа күсте, йәндәре йәннәт түрҙәрендә булһын. Иҫәндәренә именлек, һаулыҡ, ҡәҙер-хөрмәт теләйем.

Уҡытыусыларым араһында иң яратҡаны ла булды. Ул – класс етәксем, рус теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы Марат Азат улы Йәғәфәров. Беҙ уны яратып, үҙ итеп Марат ағай тип йөрөттөк. Өсөнсө класты тамамлап, Әбделкәрим урта мәктәбенә дүртенсегә килгәндә, яңы ғына институтты тамамлап килгән йәш уҡытыусы ине. Һаман да күҙ алдымда: йәш кенә, матур, төҙ кәүҙәле, елкәһенә тулҡынланып төшөп торған ҡара сәсле, ҡара мыйыҡлы, күҙҙәре көлөп торған, клеш салбарлы егет ине.

Ҡыуат, Әбделкәрим, Алғаҙы ауылдарынан өсөнсөнө тамамлап килгән балаларҙы ике "А" һәм "Б" кластарына бүлделәр. Мин "А" класына эләктем, класта 14 уҡыусы. Беҙҙең класс етәксеһе итеп Марат Азат улы тәғәйенләнде. Бәләкәй генә ҡыҙ һәм малайҙар күҙҙәребеҙҙе ҙурайтып, ҡурҡыңҡырап, уға төбәлдек. Уның күҙҙәрендә лә оялсанлыҡ, икеләнеү, ҡурҡыу сағылып ҡалды. Тик үҙенең матур йылмайыуы, ихласлығы, ипле тауышы менән бөтәбеҙҙең дә күңелен генә түгел, йөрәген дә арбап алды. Тәүге дәрестән үк оло ихтирам, ышаныс менән ҡараныҡ беҙ Марат ағайға. Шул көндән алып, ете йыл, унынсыны тамамлағансы, класс етәксебеҙ рус теле һәм әҙәбиәтенән уҡытыусыбыҙ булды. Марат Азат улы тырышлығы, сабырлығы, белеме, бар яҡтан да һәләтле булыуы менән ойошҡан, әүҙем, һәр сарала ла беренселекте бирмәгән, "Иң яҡшы класс" исеменә тиклем күтәрелгән класс коллективын ойошторҙо. Әйткәндәй, "Иң яҡшы класс" конкурсында еңеп, Өфө ҡалаһына экскурсия менән бүләкләндек. Ул ваҡыттағы мажараларҙы әле лә һөйләп көлөшөп алабыҙ.

Марат Азат улының һәр дәресе йәнле, шаулы үтә ине, бер бала ла тик ултыра алманы. Хатта "ағай, ағай!", "әсәй, әсәй!", "атай, атай!", "ҡартатай!", "мин, мин, мин!" тигән һүҙҙәр менән ҡул күтәреп, ауыҙына инә яҙа торғайныҡ. Рус әҙәбиәте дәрестәрендә әҫәрҙәрҙе өйрәнгәндә үҙ фекере, тәжрибәһе менән уртаҡлашып, беҙҙе тормошҡа өйрәтте. Класс сәғәттәрендә һәр миҙгел һайын, саңғыламы, йәйәүме, урманҡырҙарға алып сығып, тәбиғәткә, тыуған ергә һөйөү тәрбиәләне.

Походтар бер ваҡытта ла онотолмай. Бигерәк тә туғыҙынсыны тамамлаған йылғы поход. Йәйәүләп Әбделкәрим – Алғаҙы – Йомаш – Йылым маршруты буйынса һәм кирегә өс төн йоҡлап йөрөп ҡайттыҡ. Тәьҫораттар әйтеп бөткөһөҙ ине. Ошо уҡ йылды мәктәп ҡаҙанлығына утын әҙерләп, урманда үткәргән ике аҙна хеҙмәт лагерыбыҙ тормош мәктәбе булды. Шулай уҡ Марат Азат улының инициативаһы менән «Баймаҡ» совхозы Әбделкәрим бүлексәһенең һөтсөлөк фермаһында мәктәптең үҙ гурты булдырылып, 9 – 10-сы класс ҡыҙҙарының көн һайын алмашлап һауынсы эшен башҡарыу тормошта юғалып ҡалмаҫҡа өйрәтте.

"Пионерская правда", "Комсомольская правда" гәзиттәренә, "Ровесник", "Свертница" журналдарына үҙе яҙылып, беҙҙә ҡыҙыҡһыныу уятып, аңбелем даирәбеҙҙе генә үҫтереп ҡалманы, туғандаш илдәр, бигерәк тә Молдавия ҡыҙ-егеттәре менән таныштырып, хатлаштырып, дуҫлыҡ тойғоһон тәрбиәләне. Эшкә, тәртипкә, үҙаллылыҡҡа өйрәтте ул. Һәр беребеҙҙең һәләтен асып үҫтерергә тырышты. Өлкән кластарға еткәс, ҡыҙ-егет мөнәсәбәттәре, мөхәббәт темаһына ла кәңәштәре урынлы ине. Һәр уҡыусыны шәхес итеп ҡараны, һәр балаға иғтибарын йәлләмәне. Ғөмүмән, Марат Азат улы үҙ эшенә, үҙе уҡытҡан фәнгә мөкиббән киткән тырыш, һәләтле, ихтирамлы уҡытыусы булды.

Хәтерҙә, Марат Азат улы Ҡыуат ауылынан йөрөп уҡытты. Үҙе менән һәр ваҡыт фотоаппараты булыр ине. Беҙ сумкаһына аҫылынып тигәндәй ҡайтабыҙ. Йәш егет, ыбыр-сыбыр ҡыҙмалайҙарҙы эйәртеп йөрөүҙән оялғандырмы, арығандырмы, тау һыртынан үҙ һуҡмағын һалды.

Етенсе класҡа уҡырға килгәнебеҙҙә Марат ағайыбыҙ кәләш алып ҡайтты. Еңгәбеҙ Рәмилә Шәкирйән ҡыҙының һылыулығына һоҡланыуыбыҙ әле лә хәтерҙә. Ағайыбыҙға тап шундай еңгәй пар булыуына ҡыуандыҡ, һоҡландыҡ. Ҡатыны менән өс ҡыҙға ғүмер биреп, бик матур йәшәнеләр, иңгә-иң терәп бер коллективта эшләнеләр.

Марат Азат улын ихтирам итеп, рус теле фәнен һөйөү менән, ете уҡыусы ул уҡып сыҡҡан Стәрлетамаҡ дәүләт педагогия институтына уҡырға барҙыҡ, рус һәм башҡорт бүлеген өсәүебеҙ тамамланыҡ. Институтта уҡыған йылдарҙа ла уҡытыусыбыҙ беҙҙе ташламаны – хаттар яҙып, хәлебеҙҙе белеште, хатта янıбыҙға килеп тә ҡайтты.

Яҙмышымда ошондай оло йөрәкле остазым булғанына рәхмәтлемен.

Быйыл мәктәпте тамамлауыбыҙға 37 йыл булды. Осрашыуҙар ваҡытында Марат Азат улын иҫкә алып, уның кәңәштәрен, һүҙҙәрен, теләктәрен хәтерләп алабыҙ. Өйрәтеүҙәре, кәңәштәре һәр беребеҙҙең тормошонда ярҙам иткән һәм итә.

Үҙемдең һәм класташтарым исеменән Марат Азат улының туғандарына, ҡыҙҙарына, Рәмилә Шәкирйән ҡыҙына оло рәхмәтебеҙҙе белдерәм. Марат Азат улының рухы шатланһын, йәне ожмах түрҙәрендә булһын. Беҙ уны бер ҡасан да онотмайбыҙ.

Мин – Айгөл Әхмәдйән ҡыҙы Абыҙгилдина-Йәнбирҙина. Стәрлетамаҡ дәүләт педагогия институтын тамамлап, Алғаҙы мәктәбендә башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы, Баймаҡ лицей-интернатында оҙаҡ йылдар тәрбиәсе булып эшләнем. Әле Баймаҡ агросәнәғәт колледжында тәрбиәсемен. Дәрестәр, класс сәғәттәре, ниндәйҙер саралар үткәргәндә, әңгәмәләр ҡорғанда һәр ваҡыт Марат Азат улының алымдарын ҡулландым һәм ҡулланам.

Һүҙемде Мостай Кәримдең шиғыры менән тамамлар инем.

***Күп нәмәнән уңдым.***
***Рәхмәт һеҙгә,***
***Хәйерле төн һеҙгә,***
***үткәндәр!***
***Эйе, уңдым. Күп нәмәнән уңдым.***
***Минән уңды микән бүтәндәр?***

Эйе, ундыҡ, Марат Азат улы! Хөрмәтле Остазыбыҙ беҙҙең!

**Айгөл АБЫҘГИЛДИНА–ЙӘНБИРҘИНА.**

Баймаҡ районы.

# АҘНА һорауы

## Ҡот ҡойҙороп ҡарағанығыҙ бармы?

**Ҡот ҡойоу халыҡ медицинаһының кешегә уның йәшәү көсөн ҡайтарыуға бәйле традицион дауалау йолаһы булып тора. Имсе ауырыуҙы ултырғысҡа ултырта һәм уның башын ҡаплай. Шунан һауытҡа һыу һалып, уны ауырыуҙың баш осонда тотҡан килеш, иретелгән ҡурғаш ҡоя. Йола имләү һүҙҙәре менән оҙатыла. Һыу эсендә ҡатып ҡалған металл киҫәгенең һыҙаттары (эт-ҡош, имәнес йән эйәһе, кеше) буйынса имсе ҡурҡыу сәбәбен билдәләй. Ҡурғаш йөрәк формаһына ингәнгә хәтлем ҡот ҡойоу ғәмәлен ҡабатлайҙар. Аҙаҡ йөрәкте бетеү итеп ҡулланалар.**

**Ошо көндәрҙә гәзитебеҙҙең “Бәйләнештә” селтәрендәге төркөмөндә Салауат районының Әлкә ауылынан имсе Альбина Алкинаның ҡот ҡойорға өйрәткән видеояҙмаһын күптәр ҡыҙыҡһынып ҡараны. Түбәндә шунан фекерҙәрҙе килтерәбеҙ.**

**Гүзәл НУРЛЫ:**

*– Өләсәйем ҡот ҡойғанда ҡиблаға ҡаратып ултырта, башҡа яулыҡ яба, аҡ ҡурғашты иретеп, айырым сүмескә өшкөртөлгән һыу ҡойоп, көмөш тәңкә һала торғайны. Ҡурғаш ирегәс доға уҡып: "Кил, ҡотом, кил, ҡотом, ишектән дә кил, ҡотом, тишектән дә кил, ҡотом”, – тип һамаҡлар ине. Унан иретелгән ҡурғашты баш аша өйрөлтөп сүмескә ҡойоп, шулайтып өс тапҡыр эшләне. Иң аҙаҡтан ҡурғаш ҡойған сүместәге һыуҙы өшкөрөп, биткә һөртә ине.*

**Алһыу БАЙҒУСҠАРОВА:**

*– Ҡот төшмәһә, ете тапҡыр ҡоялар, ҡот ҡойоу бөтә ауырыуҙан да килешә, ти торғайны ҡартәсәйем.*

**Хаят ЙОСОПОВА:**

*– Ҡот тиҙ арала ҡойолмаһа, инәйем хужабикәгә күршеләге "еңел аяҡлы" киленде саҡырырға ҡуша. "Бар әле, шул киленде алып кил. Ул килеп инеү менән ҡойолор ул ҡот", – ти торғайны.*

**Фәриҙә БИКБОВА:**

*– Өләсәйем ҡот һыуын эсерә, “Бисмилла” итеп маңлайға, йөрәк тирәһенә, ауыҙға һөртә ине.*

**Һылыу НӘҘЕРШИНА:**

*– Өләсәйем, сүместе баш осонан өйрөлтә лә, яңылыш кешенең өҫтөнә түгелмәһен өсөн ҡурғашын ситкәрәк алып һыуына ҡоя. Ҡайнар ҡурғаш йоҡа еренә тейһә, һөйәкте лә тишеүе бар, ти торғайны.*

*Бер бәләкәс кенә, аш ҡалағынан саҡ ҡына ҙур ҡалағы бар ине. Өләсәй шунда тәүҙә малдың эс майын иретеп ала ла, ҡурғашты һала. Ул ирегәс, баш осонан ипләп кенә өйрөлтөп алып, алдан ағас сеүәтәгә өшкөрөп әҙерләнгән һыуға сайпылтмай ғына, тиҙ генә төшөрә ине.*

**Гүзәл СӘҒИТОВА:**

*– Минең дә өләсәйем ҡот ҡойҙо. Мейес башы асыҡ торһа яптыра, ишекте бикләй торғайны.*

**Илнур ЙОМАҒОЛОВ:**

*– Бала саҡта ата ҡаҙ талағандан һуң ҡурҡып ҡалдым. Ҡот ҡойған өләсәй, ысынлап та, ҡурғашта ҡаҙ һыны килеп сыҡты, тип дауаланы.*

**А. ИШНАЗАРОВ әҙерләне.**

podpiska.pochta.ru

Сәйәсәт кенә түгел

# «Беҙҙә демократия!» тип ҡысҡырған берәү һәм... уянып киткән

## “Халыҡ власы” менән йәшәүсе дәүләттәр ниңә тыныслыҡ урынлаштырмай?

*Алһыу ИШЕМҒОЛОВА*

**Европала – яңы хәүеф. Баҡһаң, ҙур-ҙур ҡалаларына тиклем ҡыҙыл ҡырмыҫҡаларҙың баҫып инеүе ихтимал. Европа ҡалалары был бөжәктәрҙең үрсеүенә уңайлы икән. Әле “утлы ҡырмыҫҡалар” Италияла мыжғый, тиҙҙән төньяҡҡараҡ та күсеүҙәре бар. Ҡыҙыл ҡырмыҫҡа (Solenopsis invicta) баҫыуҙарға һөжүм итә, электр ҡорамалдарына ла (шул иҫәптән автомобилдәргә һәм компьютерҙарға) зарар килтерергә һәләтле. Был туралағы хәбәр юҡтан таралманы инде – ысынлап та хәүеф янайҙыр. Минеңсә, был бөжәктәр Европаға янаған хәүефтәрҙең бер бәләкәй остоғо ғына. Ҡурҡаҡ, әхлаҡһыҙ, марионетка ҡитғаға күптәр таркалыу юрай.**

**Ә шулай ҙа үҙҙәренең, демократия, тип ҡырталашып ятыуҙары. БМО-ның Генераль ассамблеяһы тарафынан 2007 йылда булдырылған Халыҡ-ара демократия көнө икән бөгөн. Йыл һайын 15 сентябрҙә билдәләнә. Һеҙгә “демократия” төшөнсәһе яҡшы танышмы? Кем әйтмешләй, уны нимәгә ҡушып йотаһығыҙ?**

### Боронғо “ысын” демократия ҡалдымы икән?

Демократияның тамырҙары Боронғо Грецияңан башлана. Антик ҡала-ҡәлғәләрҙә ҡарарҙарҙы халыҡ дөйөм йыйында ҡабул иткән. Демократия ”халыҡ власы” тигәндә аңлата. Боронғо дәүләттә булғас, хәҙер бындай идара ла тарихта ҡалып бара. Әллә яңылышаммы? Хәйер, халыҡтың да төрлөһө бар бит әле, уларға идаралыҡты бирең ҡуйһа-аң...

Демократия түбәндәгеләрҙе нигеҙ итеп ала: халыҡтың бойондороҡһоҙлоғо, хөкүмәттең халыҡ ризалығы менән төҙөлөүе, күпселек принцибы, әҙселектең хоҡуҡтарын яҡлау, ирекле һайлауҙар, кеше хоҡуҡтарының гарантияланыуы, закон алдындағы тигеҙлек, властың конституцион сиклелеге, толерантлыҡ ҡиммәттәре һ.б.

Демократия дүрт төп элементтан ғибәрәт: сәйәси система һәм һайлау системаһы; граждандарҙың дәүләттең сәйәси һәм социаль тормошондағы әүҙемлеге; кешеләрҙең хоҡуҡтарын яҡлау; закон алдында тигеҙлек.

Яңы ғына, мәҫәлән, беҙ һайлау мөмкинлеген файҙаланып, үҙебеҙгә оҡшаған кандидаттарҙы депутат иттек. Демократик шарттарҙа, асыҡ һәм намыҫлы тауыш биреүҙә ҡатнаштыҡ. Артабан депутаттарыбыҙҙы тәнҡитләй ҙә алабыҙ, эштәрен контролләй ҙә. Улар инде халыҡ ихтыяждарына ҡолаҡ һалырға тейеш.

Демократия биргән мөмкинлек буйынса ижтимағи тормошта ла әүҙем ҡатнаша алабыҙ. Динде, йәшәгән урынды, хатта илде һайлау мөмкинлегенә эйәбеҙ. Киң мәғлүмәт сараларында ла, йәғни бына беҙҙә, һүҙ ирке, азатлығы бар. Йәки бар һымаҡ.

Тик демократия тип, һәр кемгә лә ярап булмай. Халыҡ – күп һанлы. Һәр кем үҙенә тарта. Шунан, Крылов мәҫәлендәгесә, суртан, аҡҡош, ҡыҫала һымаҡ була инде. Килешеп эшләмәһәң, демократия төҙөүе ҡыйын. Британия түрәһе (1940 – 1945, 1951 – 1955 йылдарҙа Премьер-министр) Уинстон Черчилль әйткән, имеш: “Демократия – идара итеүҙең һынап ҡараған бөтә формаһы араһынан иң насары...”




### Демократтар һәм демократияны төшөндә лә күрмәгәндәр нисек йәшәй?

Бөгөн донъяла тулы демократия (либераль) хөкөм һөргән 22 ил бар икән. Өлөшләтә демократиялы 55 дәүләт йәшәп ята. Ҡушма режимлы дәүләттәр (йәғни демократия ла, авторитар ҙа) һаны – 39. Власть бер кешегә тәғәйен 53 ил бар.

Иң демократик илдәрҙе иҫәпләгәндәр (мәғлүмәт 2019 йыл өсөн). Алда – Норвегия. Унан ҡала Исландия, Швеция, Яңы Зеландия, Финляндия, Ирландия, Дания, Канада, Австралия, Швейцария, АҠШ. Был дәүләттәрҙә демократия индексы 8 менән 10 араһында. Сағыштырыу өсөн: Рәсәйгә 3,11 баһаһы бирелгән.

Быйылғы рейтинг буйынса иң авторитар ил тип Корея Халыҡ Демократик Республикаһы аталған. Башында Ким Чен Ын торған дәүләт туристар өсөн ябыҡ, интернет ирекле түгел, юлдаш телевидениеһы сикле, АҠШ тауарҙарын ҡулланыу тыйыла һ.б. Ҡыҙыҡ: үҙе демократик, үҙе, ҡайһы бер мәғлүмәттәр буйынса, демократия булмаған дәүләт, имеш.

Башта ҡуйылған һорауға яуап биреү өсөн буйтым уйланырға кәрәк икән әле. Бик маҡталған идара алымы менән йәшәүсе (йәки йәшәгән булып күренеүсе) дәүләттәр бөгөн планетаның тыныслығы өсөн бер нәмә лә эшләмәй кеүек. Киреһенсә, нацизмды алға һөрә һәм утлы майҙанға кәрәсин һипкән кеүек ҡорал ебәреүен дауам итә. Рәсәйгә ҡаршы күмәкләп асыҡтан-асыҡ һуғыш алып бара. Демократия шулай буламы?..

### Әйткәндәй

Ким Чен Ын Рәсәйгә килде. Алыҫ Көнсығыштағы Хәсән станцияһына үҙенең бронепоезында килеп төштө. Ким Чен Ын менән Владимир Путин Владивостокта үткән Көнсығыш иҡтисад форумында осрашты һәм аралашты.

Сит илдең рәсми делегацияһын шартына килтереп ҡаршыланылар. Владимир Путин менән осрашыуында Ким Чен Ын ихлас йөҙ күрһәтеүебеҙгә рәхмәт белдерҙе. Рәсәй Президенты ҡунаҡҡа “Восточный” космодромын күрһәтте.

“Беҙҙең илгә Рәсәй Федерацияһы менән мөнәсәбәт өҫтөнлөклө булып тора. Был осрашыуыбыҙ үҙ-ара бәйләнештең яңы кимәленә сығыр тип өмөтләнәм. Әле һеҙ үҙегеҙҙең суверенитетығыҙҙы, хәүефһеҙлегегеҙҙе яҡлап, гегемондарға ҡаршы көрәшкә күтәрелдегеҙ. Беҙ һәр саҡ Президент Путиндың, Рәсәй Хөкүмәтенең ҡарарҙарын хуплайбыҙ. Артабан да империализмға ҡаршы көрәштә һәм бойондороҡһоҙ дәүләт төҙөүҙә бергә булырбыҙ, тип өмөтләнәм”, – тине Ким Чен Ын әфәнде.

Шулай, күптәргә ябыҡ КНДР беҙгә асыла.

Ын әфәнденең беҙгә эш сәфәре океан арьяғындағы “дуҫ түгелдәр”ҙе оторо ярһытты. Йәнәһе, беҙ КНДР менән бергә ҡорал хеҙмәттәшлеге буйынса эшләйәсәкбеҙ. Эшләнәк ни – демократия бит.

Көнсығыш иҡтисад форумында Рәсәй Президенты сығышында төрлө темаға туҡталды. Унан махсус хәрби операцияның ҡасан бөтәсәген дә белештеләр. Владимир Путиндың яуабы шундай: “...Беҙ нисек хәрби хәрәкәтте туҡтатайыҡ – ҡаршы яҡ бит контрһөжүм алып бара. Нишләйек? Беҙ троцкистар түгел: бары тик – хәрәкәт, маҡсат – бер нәмә түгел, тиергә”.

◆ **Тиҙҙән, киләсәктә, хыялда...**

**Пенсия эштәре белгесе Сергей Власов белдереүенсә, тиҙҙән Рәсәйҙә бөтә хаҡлы ялдағыларҙы индексация көтә.**

Эшләмәгәндәренә страховка пенсияһы арта, эшләгәндәргә – МРОТ күләме. “Ҙур” индексация киләһе йыл башынан башлана. Ғинуарҙа ул 5,3 процент тәшкил итәсәк. Уртаса пенсия күләме 22772 һумға етәсәк. Ҡайһы бер пенсионерҙарҙың арттырылған аҡсаны йыл аҙағында уҡ алыуы мөмкин.

Эшләп йөрөүсе пенсионерҙарға минималь эш хаҡы күләме (МРОТ) 18,5 процентҡа артып, уртаса иң түбән эш хаҡы 19242 һумға етәсәк.



* * *

**Рәсәйҙә магазиндарҙа бурҙарҙы асыҡлау өсөн махсус яһалма аҡыл технологияһы уйлап табылған.**

“Айти Групп 42” компанияһы белгестәре төҙөгән технология буйынса, дүрт нейрон селтәре реаль ваҡытта магазиндарға ҡуйылған видеокүҙәтеү камераларының эшен анализлай. Сауҙа залында йөрөгән һәр кем энә күҙәүенән үткәрелә. Ә инде мониторға анализ буйынса шикле кеше килеп инһә, аҡыллы аппарат шунда уҡ персоналға хәбәр бирә. Шуныһы бар: технология шәхси мәғлүмәттәр тураһында законды боҙмай – программа йөҙҙәрҙе уҡымай, мәғлүмәттәрҙе үҙендә һаҡламай. Бары тик бурҙы асыҡлай торған 11 характеристика (уларын да теүәлләйһе бар әле) буйынса ғына эшләй. Магазинға инһәгеҙ һәм һеҙ намыҫлы һатып алыусы икән, алан-йолан ҡаранмағыҙ, кәрәкле нәмәгеҙҙе алып, ышаныслы аҙымдар менән кассаға үтегеҙ, юҡһа яһалма аҡылға эләгеүегеҙ ихтимал...

Айсын АКБУЛАТОВА әҙерләне.

podpiska.pochta.ru

# Бабич рухын дауам итеп

**Был төйәктә Бабич тәү тәпәй баҫҡан, ошо ерҙән Зыя Мансур, Бәҙрүш Моҡамай, Назар Нәжмиҙәр һут алған. Бәрәкәтле Дүртөйлө ере башҡорт әҙәбиәтенә бихисап талантлы шәхесте бүләк иткән. Ҡасандыр күренекле шағир Шәйехзада Бабич халҡыбыҙ йәштәрен «Тулҡын» иттифағына туплаһа, бөгөн райондағы шағир-яҙыусыларҙың ижади берләшмәһе ошо исемде йөрөтә. Тимәк, Бабич рухы бында әле һүнмәй, ошо рухты дауам итеүсе ижадсылар бар һәм буласаҡ.**

6 сентябрҙә «Йәшлек» гәзите үҙенең «Изге һөнәрле ижадсы» марафонын тап ошо Дүртөйлө шағир-яҙыусыларына тапшырҙы. Гәзитебеҙҙең мәҙәниәт бүлеге мөдире Гөлнур Ҡыуатова танылған яҙыусы, журналист, БР Яҙыусылар союзы ағзаһы Рәзилә Ырыҫҡужина менән бергә матур әҙәби кисәгә барып ҡайтты.



Әҙәби осрашыу иртән шағирҙың һәйкәленә сәскә һалыуҙан башланды.

Салт аяҙ, көҙҙөң баҙыҡ ҡына ҡояш нурҙарына ҡойонған көн ине. 24 йыл элек тап ошондай матур көндә халҡыбыҙҙың күренекле шағиры Назир Нәжми вафат була. Әҙәби осрашыу иртән шағирҙың һәйкәленә сәскә һалыуҙан башланды. Тантаналы сарала Дүртөйлө районы хакимиәте башлығы Риф Йосопов ҡатнашты.

– Уны тағы ла оҙаҡ йылдар иҫкә аласаҡтар. Ул Өфө йүкәләрендә, саф һыулы шишмәләрҙә, яҙғы ташҡын һыуҙарҙа һәм, әлбиттә, беҙҙең йөрәктәрҙә йәшәй. Уның шиғырҙары һәм йырҙары беҙҙең матур тәбиғәтле Дүртөйлө ерен данлай. Бына инде бөйөк яҡташыбыҙҙың арабыҙҙан китеүенә 24 йыл, әммә уның шиғырҙары һәр беребеҙҙең хәтерендә. Һәм бөгөн Назар Нәжми ижадын һөйөүселәр уның һәйкәленә сәскә һалыуға йыйылды, – тип шағирҙың бер шиғырын һөйләп ишеттерҙе район хакимиәте башлығы.

Дүртөйлөлә Назар Нәжмиҙең исемен мәңгеләштереү буйынса бик күп эш башҡарылған. Район үҙәгендә шағир исемендәге башҡорт гимназияһы бар. Ҡалалағы урамға, скверға уның исеме бирелгән, бюст ҡуйылған.



Дүртөйлөлә Назар Нәжмиҙең исемен мәңгеләштереү буйынса бик күп эш башҡарылған.

Уның исемендәге премия булдырылған. Сараға килгән шағирҙар һәйкәл алдына баҫып ялҡынлы шиғырҙарын һөйләне, шәхескә бәйле фекерҙәре һәм иҫтәлектәре менән уртаҡлашты.

Әҙәби осрашыу район үҙәк китапханаһында дауам итте. Сараның төп ҡунаҡтары Гөлнур Ҡыуатова һәм Рәзилә Ырыҫҡужина «Йәшлек» гәзитенең проекты, уҡытыусы ижадсылар хаҡында һөйләне. Дүртөйлөләр әүҙемлеге, ойошҡанлығы менән һоҡландырҙы. Тамашаға килгән ҡунаҡтарҙың береһе лә шиғыр һөйләмәй ҡалмағандыр, мо-



ғайын. Мәҫәлән, башҡорт гимназияһының башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы, шағирә Зилә Басированың махсус хәрби операцияға бағышланған «Һуңғы хат» исемле шиғыры залдағыларҙың барыһын да зар илатты.

*Моң ағыла. Ҡурай моңо*
*Күңелдәргә үтә һуҙылып.*
*Оҫкондарын сәсеп,*
*тирә-йүнгә*
*Усаҡ яна янда һыҙылып.*
*Шул арала шартлау*
*яңғыраны,*
*Өҙөлдө моң.*
*Яраланды һалдат.*
*Ҡулында – ҡурай.*
*Ҡуйынында –*
*Әсәһенә яҙған һуңғы хат.*

Шулай уҡ Яңы Бейектау ауылынан Башҡортостандың мәғариф отличнигы Флүрә Ғәзизованың, Зөлфә Ғимазованың, Гөблөкөсөк ауылынан Флүрә Мәҡсүтованың, БР һәм РФ Яҙыусылар союзы ағзалары Светлана Васикованың, Рафаил Хафизовтың, Илдус Тимерхановтың, ундан артыҡ китап авторы Фәнис Рәхмәтуллиндың шиғырҙары барыһының да күңеленә хуш килде. Шиғырҙар



«Тулҡын» әҙәби-ижад берләшмәһе ағзаһы Марсель Булатов гитарала үҙенең шиғырына яҙған йырҙы йырлап ишеттерҙе.

«Әллүки» татар халыҡ ансамбленең матур сығыштары менән үрелеп барҙы.

«Тулҡын» әҙәби-ижад берләшмәһе ағзаһы Марсель Булатов гитарала үҙенең шиғырына яҙған йырҙы йырлап ишеттерҙе. Марсель Марс улы үҙе табип булһа ла, әҙәбиәтте яратыуы, шиғыр йәнле булыуы хаҡында һөйләне:

– Бөгөн Назар Нәжмиҙең вафат көнө булғас, уны йәнә иҫкә алып үтеү яҙыҡ булмаҫ. Мин дауаханала төнгө дежурҙа инем. Назар ағайҙы ауыр хәлдә реанимация бүлегенә килтерҙеләр. Янына индем. Үҙ аңында түгел. Төндә баш осона ултырып, йәсин сыҡтым. Хоҙайҙан уны иҫән-һау ҡалдырыуҙы һораным. Минең доғаларымды ҡабул иттеме, ниндәй мөғжизә булғандыр, иртәгәһенә Назар ағай йүгереп йөрөп ята ине. Мин һуңыраҡ ошо хаҡта шиғыр яҙҙым.

Райондың баш китапханаһыһы Алһыу Әхмәтова «Тулҡын» әҙәби-ижад берләшмәһенең эшмәкәрлеге хаҡында һөйләне. Уның һүҙҙәренсә, берләшмә 1988 йылда төҙөлә, ижадҡа ынтылыусы йәш көстәрҙе берләштереп, әүҙемләштереп ебәрә. Ошо йылдар эсендә бихисап проект тормошҡа ашырыла, әҙәби осрашыуҙар үткәрелә: Шәйехзада Бабичҡа, Назар Нәжмигә арналған әҙәби конкурстар, китап туйҙары, шиғриәт бәйгеләре. Былтыр «Яңы тулҡын» йәштәр шиғриәт мәктәбе асылған. Октябрҙә берләшмә 35 йыллыҡ юбилейын билдәләй.

Артабан сарала ҡатнашыусылар Назар Нәжмиҙең тыуған ауылы Миңештегә юл тотто.

*Йортоң, холҡоң, тәбиғәтең*
*менән*
*Йәмле яҡ тип һин*
*дан алғанһың.*
*Ләкин килгән-киткән*
*кешеләргә*
*Тиҫкәре яҡ булып*
*ҡалғанһың,* –

тип тасуирлай халыҡ шағиры тыуған ауылын. Һәр кем өсөн үҙенең тыуған яғы ҡәҙерле, әммә ҡунаҡтар өсөн дә шағир төйәге үҙе кеүек берҙәй яҡын һәм хатта бөйөк төҫлө тойолдо. Улар Назар Нәжми үткән һуҡмаҡтарға, мәғрур ҡарағайҙар теҙелеп баҫҡан тауҙарға, йәйрәп аҡҡан Ағиҙелгә, шағир данлаған Ҡандауыл тауына ҡарап таң ҡалды. Юҡ, һис тиҫкәре булманы бөйөк шағирҙы тыуҙырған төйәк – Миңеште. Бындай ерҙә тыуып шағир булмау мөмкин түгелдер, тип һоҡланышты әҙәби кисәлә ҡатнашыусылар.

Яҡташтары Назар Нәжмигә төҙөп биргән йортта, уның хәҙерге йорт-музейында ла йылы хистәр урғылды. Бында ысын мәғәнәһендә әҙип рухы йәшәй: ҡасандыр Нәжми үҙ ҡулдары менән ултыртҡан алмағаста балланып алма бешә, шағирҙың шкафтағы костюмы ла уның тән йылыһын һаҡлай төҫлө, өҫтәлендәге һуңғы яҙмаһы ла шул көйөнсә һаҡланған. Әйтерһең, шағир ҡайҙалыр сығып киткән дә, бына-бына ҡайтып инер кеүек, тәҙрәһенән ҡаршылағы Ҡандауылға һоҡланып ултырыр төҫлө...

Музей директоры Йәлил Сабиров һәм шағирә Светлана Васикова Назар Нәжмиҙең йәшлек, мөхәббәт тарихтарын һөйләп, быға са бер ҡайҙа ла баҫылмаған ҡыҙыҡлы мәғлүмәттәр менән уртаҡлашты. Ҡунаҡтар шағирҙың үҙе һөйләгән «Миләш» шиғыры аудиояҙмаһын ҡат-ҡат тыңлап, күҙенә йәш алды. Әҙәби сара Назар Нәжмиҙең ҡәберенә сәскәләр һалыу һәм уның рухына аяттар бағышлау менән тамамланды.

**Инсаф ХУЖАБИРГӘНОВ.**

podpiska.pochta.ru

Етегән

# Дарманға бай Ғәйетбайҙың ғүмер байрамы

**Наил Ғәйетбайҙың исемен атау менән күптәр уның сәхнә әҫәрҙәрен күҙ алдына килтерә. Берәүҙәр өсөн ул республиканың Мәҙәниәт министрлығында эшләгән осоро менән билдәле. Бәғзеләр, о-о, Наил Ғәйетбай ишле ғаилә башлығы бит, тип һөйләнә. Ҡайһы берәүҙәр уның еңелмәҫ оҫта шахматсы булыуына тел шартлата. Наил Ғәйетбайҙың проза өлкәһендәге ижады ла тос, фәнтәзи жанрында “Ҡара ҡумта”һы, ”Йән”е ни тора! Ә “Бабич” романы һуң! Бөйөк шәхесебеҙҙе беҙҙең күҙ алдына “тереләй” генә баҫтырҙы ла ҡуйҙы.**

**Күп яҡлы ижадсыға – Наил Ғәйетбайға – 75 йәш. Республика театрҙары ошо түңәрәк датаны махсус декада менән билдәләй: 22 сентябрҙән 29-ына тиклем туғыҙ сәхнәлә – Өфө, Сибай, Салауат, Стәрлетамаҡ, Туймазы ҡалаларында уның спектаклдәре ҡуйыла. Ә беҙ яҙыусы һәм драматургтың тормош һәм ижад юлына фотоһүрәттәр аша баҡтыҡ.**



1



Яҙыусы булып китеүемә атай-әсәйемдең йоғонтоһо ҙур булғандыр. 13 йәшемдә әсәйем менән Һәҙиә Дәүләтшина, Дауыт Юлтый, Әкрәм Вәли, Әнүәр Бикчәнтәевтың романдарын ҡысҡырып уҡыуымды һорай ине. Атайым Башҡортостанда баҫылған бар гәзит-журналды алдыра ине. Шул сәбәпле миндә әҙәбиәткә һөйөү уянды, тип уйлайым. Был фотола атайым Әсхәт, әсәйем Бибикамал, һеңлем Нурбикә менән төшкәнбеҙ. 1955 йылда ошолайыраҡ булғанмын.

2



Үткән быуаттың 80-се йылдары башында мин “Ирәндек” әҙәби берекмәһен ойоштороп, уны етәкләнем. Бик күп йәштәрҙе йәлеп иттек. Улар араһында Рәсимә Ураҡсина, Гөллирә Исхаҡова, Рәшит Туйсин, Буранбай Искужин, Әхмәр Үтәбай, Рәйес Түләк, Рәмил Дәүләткол, Фәнүзә Биктимерова, Лилиә Ҡәйепова, Зөһрә Кашапова һәм башҡалар бар ине. Ике-өс айға бер тапҡыр Баймаҡ, Әбйәлил, Хәйбулла, Йылайыр райондарында уҡыусылар менән осрашыуҙар үткәрә инек, бер-беребеҙҙең әҫәрҙәрен тикшерҙек, ултырыштарға Өфөнән билдәле яҙыусыларҙы саҡырҙыҡ. Бергә төшкән фотолар иҫтәлек булып ҡалды.

4

Башҡортостандың Яҙыусылар берлеген етәкләгән саҡта үткәргән сараларҙың иҫәбе-һаны юҡ. Иң әһәмиәтлеләренең береһе – Әҙәби марафон. Уның барышында тәжрибәле әҙиптәребеҙ республиканың башлап яҙыусы йәш ижадсыларының 3000-ләп ҡульяҙмаһын уҡып, тикшереп, анализлап, оҫталарса кәңәш бирҙе. Иң яҡшы әҫәрҙәр китап булып баҫылып сыҡты. Бынан тыш, Талҡаҫ күле буйында Ижад йорто асыу, йәш драматургтар, яҙыусылар семинарҙарын үткәреү, йәштәрҙе Яҙыусылар берлегенә ҡабул итеүҙе тергеҙеү кеүек эштәребеҙҙең файҙаһы ҙур булды. Яҙыусылар менән осрашыуҙар һәр саҡ күңелдә.



5

Бөгөнгө драматургия ауыр хәлдә. Сөнки уны үҫтереү хаҡында хәстәрлек аҙ күрелә. Быйыл сентябрь башында Ҡазанда йәш драматургтар семинары үткәрелде. Унда мине лекция уҡырға саҡырҙылар. Беҙҙә ундай сара хаҡында ишетелмәй әле.

Ә драматургияға килгәнемдән алып, 40 йылда, 60-тан ашыу пьеса яҙҙым. Уларҙың 50-нән ашыуы Башҡортостан, Татарстан, Рәсәй, Азия, Европа театрҙарында ҡуйылды. Был фотола “Нур” дәүләт татар театрындағы премьеранан һуң ҡыуанып торабыҙ.

6



Минең алты балам бар – дүрт улым, ике ҡыҙым. Улар бөтә донъяға таралған тиергә була: Тайландта, Төркиәлә, Мәскәүҙә, Өфөлә, Сибайҙа, Себерҙә йәшәйҙәр, эшләйҙәр. Береһе лә ижад юлынан китмәне. Әммә рухи яҡтан улар минән юғарыраҡ күтәрелгән.

ЮНЕСКО белдереүенсә, донъяла әлеге мәлдә 2500-гә яҡын тел бөтөү ҡурҡынысы аҫтында. Шулар араһында башҡорт теле лә бар. Ике-өс аҙнала бер тел юҡҡа сыға. Дәүләтебеҙ, мәктәптәр, китаптар, гәзит-журналдар телдәрҙе һаҡлап ҡалырға тырыша, әммә һиҙелерлек уңышҡа өлгәшә алмай.

Телде ғаилә эсендә генә һаҡлап була, ғаиләлә башҡортса һөйләшеп кенә. Мин мәктәптә, институтта русса уҡыным. Оҙаҡ йылдар рус яғында эшләнем, әммә ғаиләбеҙҙә фәҡәт башҡортса уҡығас, башҡорт яҙыусыһы булып киттем. Балаларым да башҡортса һөйләшә. Сөнки ғаиләлә үҙ телебеҙҙә аралаштыҡ. Йәштәргә лә, үҙ ғаиләгеҙҙә балаларығыҙ менән фәҡәт башҡортса һөйләшегеҙ, тиер инем.

3



Шахмат уйнарға атайым өйрәтте, ә көслө уйнарға китаптарҙан уҡып үҙаллы өйрәндем. 80-се йылдарҙа Матбуғат йортонда журналист Венер Йәнбәков миңә ҡаршы бер юлы 18 иң көслө шахматсы яҙыусы, журналист менән уйын сеансы ойоштороҙо. Уйнаусылар араһында Шәриф Биҡкол, Әнүәр Бикчәнтәев, Сабир Шәрипов, Сафуан Әлибаев, Гальперин һәм башҡалар бар ине. Мин 17,5:0,5 иҫәбе менән еңдем. Берҙән-бер тигеҙ иҫәпкә тик Тайфур ағай Сәғитов ҡына өлгәште.

Сибайҙың иң көслө 20 шахматсыһына ҡаршы бер юлы уйнаным. Унда 18:2 иҫәбе менән еңгәйнем. Был ҡалала мин күп мәктәптә, техникумда күмәк сеанс үҙгәрҙым, күп тапҡыр Сибай чемпионы булдым.



7

Ижади пландар шул: яҙышырға. Күптән түгел “Бабич”, “Йән” романдарын ижад иттем. “Тау артында нимә бар?”, “Иректең дә сиге бар”, “Башҡорт хан” пьесаларын яҙҙым. Романдар китап булып сыҡты. Ике пьесам ҡуйылды.

**А. ИШЕМҒОЛОВА**
**яҙып алды.**